# Еңелсә генә ғәрәпсә

## Ғәрәп телен өйрәнеүселәргә методик ҡулланма

## §1. Иң  алда нимәне белергә кәрәк

Ер йөҙөндә яҡынса 400 миллион кеше ғәрәп телендә һөйләшә һәм теге йәки был телдә аралашыусылар араһында һан яғынан улар икенсе урында тора. Тағы 40 миллионлап кеше уны сит тел булараҡ өйрәнгән. Сауд Ғәрәбстанында һәм Ираҡ, Катар, Бахрейн, Кувейт, Сирия, Ливан, Иордания, Алжир, Ливия, Марокко, Тунис, Египет илдәрендә ғәрәп теле рәсми аралашыу теле булып хеҙмәт итә.Ҡайһы бер илдәрҙә ул, дәүләт теле булараҡ, башҡа телдәр менән бер рәттән ҡулланыла.

Ғәрәбстан – Ислам дине тыуған ил. Ул илдәрҙә ваҡыт ай календары буйынса иҫәпләнә, йәғни һижри йыл иҫәбе алып барыла. Был иҫәп Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең (Саллаллаһу Ғәләйһи үә Сәлләм) Мәккәнән Мәҙинәгә күскән мәленән башланған.

Ғәрәп илдәрендә бөгөн сәйәхәт ҡылырға яратыусылар өсөн иң ылыҡтырғыс курорттар урынлашҡан. Өҫтәүенә, Сауд Ғәрәбстаны, Ираҡ, Куваейт, Египет – иң ҡеүәтле нефть державалары һанала. Сауд Ғәрәбстаны нефть запастары һәм уны эшкәртеү буйынсадонъяла беренсе урынды биләй.

*Бирем:* Өҫтә аталған илдәрҙе иҫтә ҡалдырығыҙ һәм тағы ла ниндәй илдәрҙә ғәрәп теленең дәүләт теле булыуын белегеҙ.

## §2. Ғәрәп теле тураһында

Ғәрәп теле – иҫ китәрлек бай һәм серле тел. Уның үҙен дә, яҙмаһын да, ҡайһы берәүҙәр бик ҡатмарлыға иҫәпләп, өйрәнә башлауҙан ваз кисә. Ысынында иһә, был хәл дөрөҫкә тап килмәй. Ғәрәп телен һәм уның яҙмаһын өйрәнеүҙә күптәр тырышлыҡ һала һәм, Аллаһы Тәғәләнең ризалығынан, уңышҡа өлгәшә. Дин юлында тормағандар ҙа, шулай уҡ, тел өйрәнеүҙе бойомға ашыралар.Тимәк, ғәрәп теле лә, башҡа телдәр кеүек, ғәҙәти күренеш, тик уны үҙләштереүҙә маҡсатлылыҡ һәм даимилыҡ булырға  тейеш.

Ғәрәп телен үҙаллы өйрәнеүҙә уңышҡа өлгәшер өсөн, түбәндәге төшөнсәләрҙе күҙ уңында тоторға тейешһегеҙ:

- Аныҡ маҡсат ҡуйыу;
- Телде яратып ҡабул итеү;
- Тотороҡлолоҡ һәм эҙмә-эҙлеклелек;
- Ваҡытты даими һәм етәрлек кимәлдә бүлеү;
- Күнекмәләрҙә төрлө саралар һәм алымдар ҡулланыу.

Былар барыһы бергә телде үҙләштереүҙә һеҙҙе уңышҡа килтерер. Әммә шуларҙың араһында шөғөлдөң даими булыуы бигерәк тә ҙур әһәмиәткә эйә. Көн һайын был эшкә 30-40 минут бүлеү – мотлаҡ! Дәреслек менән бер көн дүртәр сәғәт көсөргәнештә ултырып, иртәгәһенә был турала онотоуҙан файҙа булмаҫ. Һабаҡтарға көн дә тотоноуҙан йыбанмағыҙ һәм уларҙың береһен дә төшөрөп ҡалдырмағыҙ!

## §3. Ғәрәп теленең фонетикаһы

### ز د хәрефтәре

**د** ***(дәл)*** – **[д]** өнөнөң хәрефе. Ат дағаһына оҡшаш шәкелдәге был хәрефтең асыҡ яғы һулға ҡарай. **ز** ***(зәйн)*** хәрефенең өнө башҡорт телендәге [з] өнөнә тап килә. Яҙылышы *нөктәле өтөр* билдәһенә оҡшаш.

Иҫтә ҡалдыр: <u>ғәрәп телендә баш хәрефтәр юҡ!</u>

**Һуҙынҡы өндәр һәм уларҙы билдәләү**

Ғәрәп телендәге ҡыҫҡа әйтелешле [а,ә], [ы,и], [у,ү] һуҙынҡылары махсус билдәләр *(хәрәкәләр)* ярҙамында хәреф өҫтөндә йәки аҫтында күрһәтелә. Хәрәкә ҡуйылған хәреф ошо һуҙынҡы менән ижек төҙөй.

| Яҙылышы | Атамаһы | Әйтелеше | Яҙылыу урыны |
|---|---|---|---|
| ◌َ | фәтхә | [а], [ә]. | хәрефтең өҫтөндә |
| ◌ِ | кәсрә | [ы], [и]. | хәрефтең аҫтында |
| ◌ُ | дамма | [у], [ү]. | хәрефтең өҫтөндә |

Хәҙер ز د тартынҡыларын, хәрәкәләр менән ҡушып, уҡырға өйрәнәйек:

دَزَ دِزِ دَزِ دُزُ دَزُ دُزِ زَدَ زَدِ زُدِ   زَزَدِ   زُدِدَ

**Иҫкәрмә**: ز د хәрефтәре үҙ-ара тоташтырылмай, уларҙың араһында бер миллиметрҙай ара ҡалдырыла.

## ذ **һәм** ر **хәрефтәре**

ذ ***(ҙәл)*** хәрефе башҡорт теленең **[ҙ]** өнөнә тап килә. Хәреф өҫтөнә бер нөктә өҫтәп, د *(дәл)* кеүек яҙыла. Эргәһендә килеүсе башҡа хәрефтәр менән тоташтырылмай. Инглиз, грек телдәрендә лә шулай уҡ яңғырай: **th**is, **th**at, **th**ere  һ.б. Урыҫ телендәге һүҙҙәрҙең транскрипцияһында *заль (з)* тип бирелә.

1(1)-се күнегеү:

*ҙазиду, ҙудада, зудаду, задиҙа, дуҙаҙа, дизуҙу, ҙадиди, зазазу, ҙаҙизу* һүҙҙәрен яҙығыҙ.

Өлгө: заҙада – زَذَدَ

ر **(ра) хәрефе** ز *(зәйн)* хәрефе кеүек яҙыла, тик быныһы нөктәһеҙ. Яҙғанда башҡа хәрефтәр менән тоташтырылмай. Уҡылышы – **[р]**.

2(1)-се күнегеү. *ҙарадара, зараҙару, разраҙдари, раҙи, руҙа, дури, дира, ҙури* һүҙҙәрен яҙығыҙ.

2(2)-се күнегеү. Киләһе биремдәрҙең транскрипцияһын яҙығыҙ:

ذَدِرَرُ   رُرُدِذُ   زُرِدَ   رَدُدِزَذِرِدِ   رَدِ   رَدِزَذِ

### Сәкен

Тартынҡы өндөң артында һуҙынҡы өн булмаған осраҡта *сәкен* ҡулланыла. Ул хәрефтең өҫтөнә ҡуйыла. Был осраҡта сәкенле  хәреф ижектең, йәки һүҙҙең аҙағында осрай:

دَرَ دِرُزَ = دَرْ دِرُزْ   رِزْدَزُذ

[дара], [дируза]  һүҙҙәрендә *сәкен* юҡ, бөтә тартынҡылар ҙа һуҙынҡы өндәр менән яңғыратыла. [да**р**], [дируз], [риздазуҙ] миҫалдарында сәкенле тартынҡылар үҙҙәре генә, һуҙынҡыһыҙ уҡыла.

**Ҡабатлайыҡ:** әгәр тартынҡы хәрефтең өҫтөндә  *фәтхә* торһа, уға [**а,ә**] һуҙынҡыһы ялғана; *кәсрә* ҡуйылһа,  [***ы,и***] ҡушыла;  *дамма* осраһа, [ ***у,ү***] өҫтәлә, йәғни тартынҡы өн менән һуҙынҡынан  ижек яһап уҡыйбыҙ.

*Сәкен*  тартынҡы өндөң артында һуҙынҡы тормаған осраҡта ҡуйыла, йәғни ижекте ябыусы тартынҡыны күрһәтә. Аңлашылһын өсөн, башҡорт телендә миҫал килтерәйек: *сәләм* һүҙендә *с, л* тартынҡылары *ә* һуҙынҡыһы менән асыҡ ижек төҙөүселәр, *м* тартынҡыһы ижекте ябыусы өн, сөнки уның артында һуҙынҡы юҡ.

Ғәрәп телендә миҫал ҡарайыҡ:

زَرِرْ – [*зарир*] һүҙенең аҙағындағы *(ра)* хәрефенең артында һуҙынҡы юҡ, шуға күрә ул сәкенле.

3(3)-сө күнегеү. Түбәндәге хәрефтәр теҙмәһенең транскрипцияһын яҙығыҙ:

دَرُذْ دِرْذُ زُرْدُ ذَرْدُ زُرُدْذُ دَرِرِدْ دِذِرْدِ دِرْدْ

4(2)-се күнегеү. Хәрәкәләр һәм сәкенде ирекле ҡулланып, өйрәнелгән тартынҡы хәрефтәрҙе 15-25 тапҡыр ярышлап яҙығыҙ.

5(2)-се күнегеү. Һүҙҙәрҙе мөмкин тиклем дөрөҫ әйтеп, түбәндәге тексты уҡығыҙ:

دَرْدِ_زَرْدُ_ذُرْدِدْرَ_دَرْدِرُ_رَدِ_زَرِدِدِ_ذَرْدُ_رِرْدْ_دِرْدِ

Тоташҡан хәрефтәр араһындағы һыҙыҡтар һүҙҙәрҙе бер-береһенән айырыу өсөн ҡулланылған.

## Тәшдид

ّ *Тәшдид* – тартынҡы өндөң ике тапҡыр ҡабатланыуын күрһәтеүсе билдә (*шәддә* тип тә атала). Инглиз һәм латин алфавитындағы «**W**» хәрефенең бер-нисә тапҡыр бәләкәйләтелгән күсермәһенә оҡшаш. Әгәр ҙә хәреф өҫтөндә *фәтхә* йәки *дамма* торһа, *тәшдид* хәрефтең өҫтөнә ҡуйыла; ә инде *кәсрә* осраһа, кәсрә үҙе *тәшдид* аҫтына ҡуйыла, йәғни *тәшдид кәсрәнең аҫтына ҡуйылмай.* Мәҫәлән, [дәррә], [дүрри], [дүррү] دُرِّ دَرَّ دُرُّ

**Иҫкәрмә**: икенсе өлгөгә ҡарағыҙ. Унда кәсрә тәшдид аҫтына ҡуйылған. Әммә һеҙ уны хәреф аҫтына ҡуя ла алаһығыҙ. Ул саҡта тәшдид урынында ҡала. Хәҙерге ғәрәп телендә беҙ күрһәткән өлгө ҡулланыла.

5(2)-се күнегеү. Ғәрәп хәрефтәре менән яҙығыҙ:

(дәрру, зәрру, ҙәрру, зәрдиддәру, ҙәрдирзәру, руҙдәддү, диддү, дәд).

6 (2)-се күнегеү. Транскрипцияһын яҙығыҙ:

دَرْدَ رَدَّرُ ذُرْدَ رَرِّدْزَ زَرْدْ ذُرْدْ رَدْذِ

## ا *(әлиф)* хәрефе

**ا** ***(әлиф)*** – **[ә]** өнөнөң хәрефе. Ул ике осраҡта: 1) үҙаллы һуҙынҡыны атағанда; 2) бер үк һуҙынҡы өндө һуҙып уҡығанда ҡулланыла. Башҡа хәрефтәр менән тоташтырылмай.

Тәүҙә һуҙынҡыны оҙаҡ итеп һуҙып уҡыған осраҡты ҡарайыҡ. Оҙон һуҙынҡы тип, мәҫәлән, бер [ә] урынына һуҙып ике [әә] тип әйтеү осрағы атала: *дәрә, диру, зәрә, ҙәри* һ.б. ошондай һүҙҙәрҙә ҡыҫҡа әйтелешле һуҙынҡы; *дәәра, дииру, зәәра, зәәрәә, ҙәәрии* һ.б.ошоға оҡшаш һүҙҙәрҙә оҙон һуҙынҡы ҡулланыла. Ғәрәп телендә оҙон [әә] һуҙынҡыһын яҙыу өсөн *фәтхәле тартынҡы өндөң артынан яңғыҙ әлиф билдәһе ҡуйыла*. Транскрипциһында ике *әә* яҙыла һәм уҡыла:

дәәрә, дирәә, дәәрәә, зәрәә, ҙәәрә, ҙәәрәәзидәә.

دَارَ   دِرَا   دَارَا   زَرَا   ذَارَ   ذَارَازِدَا

**Иҫтә ҡалдырығыҙ**: [әә] тип һуҙып уҡыр өсөн, фәтхәле хәреф яҙырға кәрәк һәм был хәрефтән һуң *әлиф* тороуы мөһим.

7(3)-сө күнегеү. Һеҙ белгән хәрефтәргә 15-20 тапҡыр оҙон [әә] һуҙынҡыһын өҫтәп яҙыу осрағын күрһәтегеҙ.

8(3)-сө күнегеү. Ғәрәп хәрефтәре менән яҙығыҙ:

Зәәзәә зәәрәә раараа зәәзәә зәәдәәдәә дираа зәзәәзә зәәраа рараа

9(2)-се күнегеү. Транскрипцияһын яҙығыҙ:

دَارَادَذَاذَارَّادَادَارِدَّارِدَازَارَادَرْدَارَدَازْذِرَا

10(1)-се күнегеү. Кәрәкле урындарҙа фәтхә ҡуйып сығығыҙ:

رِدا   دِرا   ز   اداذادِزُرْدا   دارْدَ   داذارْزُ

## و хәрефе

**و** ***(уау)*** хәрефе – үҙаллы тартынҡы хәреф. Инглиз телендә <u>wh</u>at, <u>wh</u>ether, <u>wh</u>ere, башҡорт телендә *вакыт [уакыт], ватан [уатан], Вәли [үәли]* һүҙҙәрендәгесә уҡыла. Башҡа хәрефтәр менән тоташтырылмай, айырым яҙыла. Һуҙынҡылар менән

ижек төҙөй. Әлиф кеүек, ике осраҡта ҡулланыла. Транскрипцияһында [у], [ү] тип уҡыйбыҙ.

*[үү,] [уу] оҙон һуҙынҡылары яҙыр өсөн, тартынҡы хәреф өҫтөнә дамма ҡуйырға һәм унан һуң* و *хәрефе* яҙырға кәрәк:

*руу, дүү, дүүзүү, ҙүүдүү.*

رُو دُو دُوزُو ذُودُو

*Уау* хәрефен *тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәр* итеп уҡыу осраҡтарын ҡарайыҡ:

*ўәдүүдү, дүўәәди, дүўўәәри, дүўәә, ўәәдә, ўүүдү, ўәзәәзүүдүү*

وَدُودُ دُوَادِ دُوَّارِ دُوَا وَادَ وُودُ وَزَازُودُو

11(3)-сө күнегеү. Үҙегеҙ белгән хәрефтәрҙе, өйрәнелгән ҡағиҙәләр буйынса, 15-25 осраҡта ярышлап яҙығыҙ.

12 (3)-сө күнегеү. *(уау)* хәрефен 20 тапҡыр төрлө хәрефтәр менән бергә яҙығыҙ.

13(3)-сө күнегеү. *уәү, зәл, рә* тартынҡыларын *фәтхә, дамма* һәм *сәкен* билдәләре менән бергә яҙығыҙ.

14 (2)-се күнегеү. Түбәндәге һүҙҙәрҙе *кириллицаға* күсерегеҙ:

وَّاوُّودُ رَا رَادَاوِّرَا وَّاوِّدا دَا زَا ذَا زَاذَا رَرَا

**Тәнвинле «дамма» йәки «даммалы» тәнвин** ◌ٌ

Ғәрәп телендә исем, сифат һәм һандарҙы атаусы һүҙҙәргә күп осраҡта ◌ٌ – *-үн* ялғауы ҡушыла. Был ялғауҙы күрһәтеүсе билдә һүҙҙәрҙәге һуңғы хәреф өҫтөнә ҡуйыла һәм яҙылышы менән ике өтөр, йәки ике дамма ҡушылыуҙы хәтерләтә.

Түбәндәге һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырығыҙ:

Йөк, имгәк; ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ – *үизр**үн*** - وِزْرٌ

рауза – *уәрд**үн*** - وَرْدٌ

өй,йорт, бина – *дәрр**үн*** — دَرٌّ

һәм – *уә* — وَ

Был һүҙҙәрҙе отоп алһағыҙ, афарин! Хәҙер шулар менән тәү тапҡыр ябай ғына һөйләм төҙөп ҡарайыҡ:

*Рауза һәм йорт. – уәрдүн уә дәррүн.* وَرْدٌ وَ دَرٌّ

15(3)-сө күнегеү. Иң аҙаҡҡы торған хәрефтәр өҫтөнә *тәнвин* өҫтәп сығығыҙ:

زَرْد وُّرِد دَرّ ذِرْدِز رَار زَذَادَارّارْد رَّا وَرْد
راد

16 (1)-се күнегеү. Төрлө хәрефтәрҙән 30 ҡушылма төҙөгөҙ һәм аҙаҡҡы хәрефтәр өҫтөнә *тәнвин* ҡуйып сығығыҙ.

## Һәмзә ء

*Һәмзә* – хәрефтең өҫтөнә лә, аҫтына ла ҡуйыла торған махсус билдә. Ул тик өс ярымһуҙынҡы хәрефтәренә (*әлиф, уәү, йә*) ҡарата ғына ҡулланыла.

Әлегә *әлиф, уау* менән миҫалдарҙы ҡарайыҡ. Үрҙә әйтелгәнсә, *әлифтең* ижектән тыш үҙаллы һуҙынҡы хәреф була алыуын беләһегеҙ ине инде. Был осраҡта *әлифтең* өҫтөнә *һәмзә*, ә уның өҫтөнә *фәтхә* менән *дамма* ҡуйыла: أُ أَ

*Кәсрә* кәрәккәндә, *һәмзә әлифтең* аҫтына, ә *кәсрә һәмзәнән* дә аҫҡараҡ төшә: إِ

Ике осраҡты сағыштырайыҡ: *рәә* һәм *рәьәь*. Беренсе осраҡта *әә* һуҙып уҡылһа, икенсеһендә *рә* ижеген һуҙмай әйтәбеҙ ҙә, әҙ генә ваҡытҡа туҡталыш яһайбыҙ һәм тамаҡ төбөнән өҙөк [*әь*] өнөн сығарабыҙ.

رَا ذَارَ وَرْدَا رَدَا وَزَا һүҙҙәрендә *әлиф* ижек яһаусы һәм һуҙынҡыны оҙонайтыусы билдә булараҡ ҡулланылған.

*Һәмзәле әлиф*, йәғни *үҙаллы* أَ – [*ә*], أُ – [*ү*], إِ – [*и*] һүҙҙең башында ғына яҙыла:

رَأَ أَرْدَ إِرَزَ أُرِدْ أَرٌ رِأُدٌّ

**Иҫтә ҡалдырығыҙ: һәмзәһеҙ килеш әлиф һүҙ башында яҙылмай!**

Был осраҡта و *(уәү)* хәрефенең ҡулланылышы башҡасараҡ. Унын менән яҙғанда, *һәмзә* билдәһе һәр саҡ өҫтә була. *Фәтхә* һәм *дамма һәмзәнән* дә өҫтә, *кәсрә* хәрефтең аҫтында күрһәтелә. Ләкин *һәмзә фәтхә* менән бергә торғанда, ؤَ (*уәү)* хәрефе урынына [*ә*]; *кәсрә* менән – ؤِ [*и*]; *дамма* менән – ؤُ [*ү*] тип уҡыла.

Шулай итеп, был осраҡта و ( *уәү)* тартынҡы хәреф булыуҙан туҡтай.

و (*уәү)* һуҙынҡыны оҙайтып уҡыуҙы күрһәткән әлифтән айырмалы рәүештә, һәмзәһеҙ ҙә килә ала. Шулай итеп, уны ҡулланыуҙың өс төрлө тәғәйенләнешен белдек. Хәҙер шуларҙы миҫалдарҙа күҙәтәйек.

Тартынҡы *уәү* хәрефе: وَرْدٌ وِزْرٌ وُرْدٌ دَوٌّ دِزِرِوَرٌ

[*Ү*] һуҙынҡыһын оҙайтыу осрағы: وُورِدٌ رُودَزُ زُو ذُو زِرُو

Һәмзәле *уәү:* ؤِ ؤُ ؤَ دَؤَرِد دِرْزَذْؤُدٌ

17 (3)-се күнегеү. 15-шәр тапҡыр *уәү* һәм *әлиф* хәрефтәрен һәр рәүешендә (оҙон һуҙынҡы; үҙаллы, һәмзәле һуҙынҡы; тартынҡы өндөң хәрефе итеп) яҙығыҙ.

18 (2)-се күнегеү. Иҫкә төшөрөгөҙ: әлиф үҙе генә хәреф булып ҡулланыламы?

19-сы күнегеү. Түбәндәге һүҙҙәрҙе уҡығыҙ, күсереп яҙығыҙ, кириллацала транскрипцияһын төҙөгөҙ:

دَرِّؤَدِ زُرْدِأُذِ زَرْؤَدِ ذَاأَدُودُ رَزِذُ ذأَرَ زَارَ

**Яңы һүҙҙәрҙе ятлағыҙ:**

Барып күр – *зәәрә* زَارَ

Яратыу, һөйөү – *үидәәд**үн*** وِدَادٌ

## Һандар

Күп ғәрәп илдәрендә һинд (беҙ уларҙы ғәрәп һандары тип атайбыҙ) цифралары ҡулланыла.Уларҙың яҙылышы беҙ ҡулланғандарынан бик ныҡ айырыла, ләкин беҙҙәгесә, һулдан уңға ҡарай яҙыла:

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 0 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| ١ | ٢ | ٣ | ٤ | ٥ | ٦ | ٧ | ٨ | ٩ | ٠ |

Яҙыу өлгөләре: 25–٢٥, 48–٤٨, 003–٠٠٣, 156–١٥٦, 17890–١٧٨٩٠,

2011– ٢٠١١, 2012–٢٠١٢, 30–٣٠,01–٠١, 2012–٢٠١٢

20(1)-се күнегеү.Түбәндәге һандарҙы ғәрәпсә яҙығыҙ:

5, 4798, 45665, 5487, 946531, 123, 45, 67890, 123456, 7896587, 5120223, 157, 41025

21 (2)-се күнегеү. Үҙебеҙҙең цифралар менән яҙығыҙ:

٠٩٨ ٧٦٥ ٤٣٢ ١٢٢ ١٧٨٩٠ ٢٠١١ ٠١٢٠١٢ ٢٠١٢٣٠

22 (3)-се күнегеү. Ғәмәлде үтәгеҙ: =٢٠١١+٢٠١٢

**Иғтибар итегеҙ**: тигеҙлек билдәһе һул яҡлап яҙылһа ла, яуаптағы һандарҙың тәртибе, ғәрәпсә лә (**10=**5+5), беҙҙеңсә лә бер үк (5+5=**10**).

23-сө күнегеү. Ғәрәпсә билдәләр менән: 1)Үҙегеҙ теләгәнсә, 300 төрлө һандар яҙығыҙ. 2)Төрлө ғәмәлдәргә 50 миҫал төҙөгөҙ һәм яуабын яҙығыҙ. 3)Тыуған көн, байрамдар, иҫтәлекле көндәрҙең даталарын теркәп ҡарағыҙ.

## Тоташтырып яҙылған хәрефтәр

Һеҙ быҒаса өйрәнгән алты хәреф башҡалары менән тоташтырылмай яҙыла ине. (Ләкин алда беҙ уларҙың бер яҡлап тоташтырылырын да белербеҙ). Ғәрәп алфавитындағы 28 хәрефтең ҡалған 22-һе ике яҡтан да тоташтырыла. Шундайҙарҙың беренсеһе

ب (бә) **хәрефе [б]** өнөн яҙыу өсөн ҡулланыла. Дүрт төрлө шәкеле бар:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـب | ـبـ | بـ | ب |

Айырым ب – хәрефтең төп шәкеле булараҡ, алфавитта күрһәтелә һәм тоташтырылмай торған хәрефтәрҙән һуң яҙыла.

Һүҙ, йәки ижек башында торған بـ алғы позициялағы хәреф тип атала.

Һүҙ уртаһындағы ـبـ алдағы хәрефтән һуң яҙылыу осрағын күрһәтә.

ـب – һүҙ, йә ябыҡ ижектең аҙағында осрай.

Түбәндәге өлгөләрҙә *бә* хәрефенең, һүҙ эсендәге урынына ҡарап, айырмаларына иғтибар итегеҙ (уларҙың аҫтына һыҙылған), иҫтә ҡалдырығыҙ: *бәдә, бәәдә, бүдду, зәбдәзи, зүбүүдиббәә, бүддә, әбдүб, бәбдә.*

بَدَ بَادَ بُدُّ زَبْدَزِ زُبُودِبَّا بُدَّ أَبْدُب بَبْدَ

**Иҫкәрмә:** тоташтырылмай айырым яҙыла торған алты хәрефте тоташтырылырға яраҡлы хәрефтең артынан «тағырға» мөмкин, ә үҙенән һуң килгәненә тоташтырырға ярамай. Миҫалдар килтерәйек.

*дәәраа, дәра, разә, ҙәра, дүүруудәәри* һүҙҙәрендә бер хәреф тә үҙ-ара ялғанмай:

دَارَ دَرَ رَزَ ذَرَ دُورُودَارِ

*бәрдүн, бәәбүн, бәәридүн, раббаа, раббуу* һүҙҙәрендә *бә* хәрефенән артта килгәндәре уға тоташтырылған:

بَرْدٌ بَابٌ بَارِدٌ رَبَّا رَبُّو

**Яңы һүҙҙәр үҙләштерәйек:**

һыуыҡ – *бәрд**үн*** (исем) بَرْدٌ

һыуыҡ – *бәәрид**үн*** (сифат) بَارِدٌ

ишек – *бәәб**үн*** بَابٌ

ата, атай – *әб**үн*** أَبٌ

24(3)-се күнегеү. Хәрефтәрҙе тоташтырыу ҡағиҙәләрен ҡулланып, уларҙы 100 тапҡыр ирекле рәүештә яҙығыҙ.

25 (3)-се күнегеү. Иҫтә ҡалдырыр өсөн, *бә* хәрефенең төрлө осраҡта ҡулланыла торған дүрт төрлө шәкелен дә 250 тапҡыр яҙығыҙ.

26 (2)-се күнегеү. Яңы һөйләмдәр төҙөп ҡарағыҙ.

27 (2)-се күнегеү. Түбәндәге теҙемде уҡығыҙ, күсереп яҙығыҙ, транскрипциялағыҙ, ятлағыҙ:

زَارَ دَرٌّ بابٌ بَارِدٌ وِدَادٌ وَ دَرٌّ و وِزْرٌ

**ت (тә) хәрефе [т]** өнөнөң тамғаһы. Яҙылышы *бә* хәрефенә оҡшаш, тик аҫтағы бер нөктә урынына өҫкә ике нөктә ҡуйыла.

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـت | ـتـ | تـ | ت |

28 (1)-се күнегеү. Уҡырға өйрәнегеҙ, 10 тапҡыр күсереп яҙығыҙ:

تَ تِ تُ تَتْ تِتْ تُتْ تَتِتُ تَتْتُ تِتُتَ

ث **(çә) хәрефе** менән [ç] өнөн тамғалайбыҙ. Уның яҙылышы алдағы хәрефтәргә оҡшаш, тик өҫ яҡтан өс нөктә менән айырыла. Бындай өн, башҡорт теленән тыш, эллин һәм инглиз телендә лә бар: **th**eatre.

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـث | ـثـ | ثـ | ث |

29 (1)-се күнегеү. Шыма уҡырға өйрәнгәндән һуң, 10 тапҡыр күсереп яҙығыҙ:

ثَ ثِ ثُ ثَثْ ثِثْ ثُثْ ثَثِثُ ثَثِثْ ثُثُثِ

30(1)-се күнегеү. Түбәндәге һүҙҙәрҙе ғәрәп хәрефтәре менән яҙығыҙ:

*бәрдүн, дәрбүн, тәбрузү, тәриçү, бәәбүн, үидәәдүн, бәәризүн, тәдбүрү, дәәрун, ҙүбәәбүн, зәәдүн, çәбәтүн, çәбитүн, бәәридүн, үәриçат, раатибү.*

**Яңы һүҙлек эше тәкдим итәбеҙ:**

танылған, билдәле, атҡаҙанған – *бәәриз**үн*** بَارِزٌ

юл, һуҡмаҡ – *дәрб**үн*** دَرْبٌ

аҙыҡ, ризыҡ – *зәәр**үн*** زَادٌ

31 (1)-се күнегеү. Өҫтәге һүҙҙәрҙе ятлап алғас, 40 тапҡыр иçтән яҙығыҙ.

**[н]** өнө **ن (нүн) хәрефенең** дүрт төрлө шәкеле менән яҙыла:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـن | ـنـ | نـ | ن |

32(1)-се күнегеү. Һүҙҙәрҙе шыма итеп уҡырға өйрәнгәс, 25 тапҡыр ҡабатлап яҙығыҙ:

نَ نِ نُ نَنْ نِنْ نُنْ نَنِنُ نِنَنُ نُنِنْ نَنَنِ نَنُ نِنِنُ

33(2)-се күнегеү. Һүҙҙәрҙе уҡығыҙ, яҙырға өйрәнегеҙ, кириллицаға әйләндерегеҙ:

| | | | |
|---|---|---|---|
| بِنْتَانِ | نَادِرٌ | بِنْتٌ | نَبَات |
| بَذَرْنَ | دَذْرِنْبَ | نَنَرْ | نَارٌ |
| تَبْرُزُ | ذُبْنَ | دُرْنَ | بَنَاتٌ |

**ج (джим) хәрефе [дж]** өндәре менән атала. Яҙылышы түбәндәгесә:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـج | ـجـ | جـ | ج |

34 (1)-се күнегеү. Шыма итеп уҡырға өйрәнегеҙ:

جَ جِ جُ جَجَّ جَدْجَدْ جَدٌّ جِدَ بَجْدَ بَاجَدَ ذَاجُودَابٌ جَدُّو جِدَّتُو

35(2)-се күнегеү. Өйрәнгән ҡағиҙәләр буйынса, үҙегеҙ белгән хәрефтәрҙе һәр төрлө осраҡта 20 тапҡыр дөрөҫ тоташтырып яҙығыҙ.

**ح (хә) хәрефе** менән йомшаҡ әйтелешле **[х]** өнөн тамғалайҙар. Шәкеле **ج (джим)** хәрефен ҡабатлай, тик нөктәһе генә юҡ. Башҡа хәрефтәр менән ике яҡтан да тоташтырыла һәм дүрт осраҡта ла ҡулланыла:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـح | ـحـ | حـ | ح |

36(1)-се күнегеү. Түбәндәге теҙемде уҡығыҙ, күсереп яҙығыҙ, транскрипциялағыҙ, ятлап алығыҙ:

رُوحٌ رَذِدٌّبْ حَجٌّ رَجٌّ دِحْرَجْ حِرَاجٌّ رَاحِجٌّ جَحٌّ

**Яңы һүҙҙәрҙе отоп алығыҙ:**

حَجٌّ *хәджүн* – хаж (Мәккәгә хаж ҡылыу)

جَدٌّ *джәддүн* – олатай

## خхәрефе

**خ (ха)** – тамаҡ төбөнән сыҡҡан, ҡаты әйтелешле **[х]** өнөнөң хәрефе. Яҙылышына талаптар унан алдағы хәрефтеке менән бер төрлө:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـخ | ـخـ | خـ | خ |

37(1)-се күнегеү. Шыма итеп уҡырға һәм яҙырға өйрәнегеҙ:

حَارٌ خُبْزٌ حُوتٌ نُورٌ أَخِرٌ خَرَجَ خَرُوجٌ خَ خِ خْ

38(2)-се күнегеү. Ғәрәпсә (ха), (дж), (хә) хәрефтәренең төрлө шәкелдәрен, башҡа хәрефтәр менән ярышлап, 10-15 тапҡыр яҙығыҙ.

39(2)-се күнегеү. Яңы һүҙҙәр менән танышығыҙ:

حَارٌ *хәәрун* – эҫе; أَخَرٌ *ахарун*– һуңғы;

خُبْزٌ *хубрун* – икмәк; نُورٌ *ннурун*– яҡтылыҡ;

حُوتٌ **хүүтүн** – кит балығы; خَرَجَ *хараджа* – сығыу (ҡылым)

خَرُوجٌ *хараджун* – сығыш, сығыу урыны;

40 (2)-се күнегеү. Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙе отоп алығыҙ:

خُبْزٌ حَارٌ – эҫе икмәк;

خَرُوجٌ اخِرٌ – һуңғы сығыш;

جَدٌّ بَارِزٌ – билдәле, күренекле олатай.

ه (hə) - **[h]** өнөнөң хәрефе. Шәкелдәре түбәндәгесә:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـه | ـهـ | هـ | ه |

41(1)-се күнегеү. Шыма итеп уҡырға өйрәнгәндән һуң, яттан яҙығыҙ:

هِرٌّ هَ هِ هُ هَهِهُ هِهِهَ هَهِهُ هٍ هٌ هً هِرَهِ وَجْه

42(2)-се күнегеү. Яңы хәрефте 10-15 төрлө осраҡта башҡалар менән берләштереп яҙып ҡарағыҙ.

ي **(йә)** – йомшаҡ әйтелешле ярым һуҙынҡы **[й]** өнөнөң хәрефе. *Әлиф* һәм *үәү* кеүек, икеләтелгән һуҙынҡы урынына ҡулланыла ала. Был осраҡта ул *кәсрәле* тартынҡы артынан киләә.

43(1)-се күнегеү. Ҡағиҙәләргә бәйле рәүештә, яңы хәрефте электән таныш хәрефтәр менән ҡушып, 30 өлгө яҙығыҙ.

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ي | ﻴ | ﻳ | ي |

44(2)-се күнегеү. Күсереп алырҙан алда, ҡат-ҡат уҡып иҫтә ҡалдырығыҙ:

يَدٌّ يَيِيُ ثَرُثَ رَبٌّ رَذَدَ أَرْدَيَ دَرِي بَارِيدٌ رَابِ

45(3)-се күнегеү. Икеләтелгән (оҙон) һуҙынҡы хәрефтәр менән 20-ләп ижек төҙөп яҙығыҙ.

ل – был хәреф (ләм) тип атала һәм [л] өнөнөң шәкеле булып йөрөй.

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ل | ﻠ | ﻟ | ل |

46(1)-се күнегеү. Аҫтағы һүҙҙәрҙе уҡырға һәм яҙырға өйрәнегеҙ:

الله إِلَهُ لَحِ لَرَجَ أَلْبَارِدُ أُلِجَ جِلْدٌ وَلَدٌ لَحَجَلَرَلٌ

47(2)-се күнегеү. Быҕаса өйрәнгән хәрефтәрҙе 40 төрлө тоташтырып яҙығыҙ.

Түбәндәге таблицанан **[к]** өнөнөң тамғаларын иҫтә ҡалдырығыҙ.Уның хәрефе ك **(кәф)** тип атала:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ك | ﻜ | ﻛ | ك |

48 (1)-се күнегеү. *Кәф* хәрефен, һеҙгә таныш башҡа тамғалар менән тоташтырып, 20-25 тапҡыр яҙығыҙ.

ق **(ҡаф)** тартынҡы **[ҡ]** өнөнөң хәрефе. Уның яҙылышы ла дүрт төрлө:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ق | ﻘ | ﻗ | ق |

49 (1)-се күнегеү. Һүҙҙәрҙе уҡығыҙ, күсереп алғанда яҙылышын иҫтә ҡалдырығыҙ:

قَرَقَ قَلِقَ قَالَ قِرْدٌ قَرَّرَ كُرَ كِرَرَ كَرِيرِ كَبِيرٌ اَكْبَرُ

50(2)-се күнегеү. Хәрефтәрҙе тоташтырыуҙың 10 төрлө вариантын яҙып күрһәтегеҙ.

س **(сад) хәрефе** менән **[с]** өнөн билдәләйҙәр. Яҙылышы түбәндәгесә:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| س | ﺴ | ﺳ | س |

51(1)-се күнегеү. Яңы хәрефте ҡулланырға өйрәнер өсөн, 150 тапҡыр башҡа хәрефтәр менән ҡушып яҙығыҙ.

**[ш]** өнөн атаусы ش **(шин) хәрефенең** шәкеле алдағы хәрефкә оҡшаш. Тик унынһынан айырмалы рәүештә, өс нөктә менән яҙыла:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ش | ﺸ | ﺷ | ش |

52- се күнегеү. Шыма итеп уҡырға һәм тиҙ яҙырға өйрәнегеҙ:

شَ شِ شُ شَسْ شِرَاثٌ شَرَقَ قَرَسَ رَقَشَ شِرْقٌ

53 (3) -се күнегеү. Яңы һүҙҙәрҙе ятлап алығыҙ:

| | | | |
|---|---|---|---|
| قِرْشٌ | Акула | هَلاَلٌ | Хәләл |
| كِرْشٌ | Ҡорһаҡ, эс | حَقٌّ | Хаҡлыҡ |
| يَدٌّ | Ҡул | قَهْقَهَ | Көлөү |
| الله | Аллаh | كَلْبٌ | Эт |
| رَبٌّ | Раббы | كِلاَبٌ | Эттәр |

م **(мим) хәрефенең** өнөн, беҙҙекесә, **[м]** тип уҡыйбыҙ. Ул да дүрт шәкелле:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|

| | | | |
|---|---|---|---|
| م | ـم | ـمـ | م |

54(1)-се күнегеү. (мим) хәрефен, үҙегеҙ теләгәнсә башҡа хәрефтәргә ҡушып, 33 төрлө яҙып ҡарағыҙ.

Ике яҡлап тоташтырылыусы хәрефтәр араһында **[ф] өнөнөң хәрефе** лә бар – ف **(фә).**

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ башында | Айырым хәреф тамғаһы |
|---|---|---|---|
| ـف | ـفـ | فـ | ف |

55(2)-се күнегеү. Таныш хәрефтәр гә ялғап 15-20 тапҡыр (мим) һәм (фә) хәрефтәрен яҙығыҙ.

56(1)-се күнегеү. Уҡырға өйрәнгәс, күсереп яҙығыҙ:

مَفَ مِفَ مُوفِ فَمَنْ فَهَمَ فَاهِمٌ فِمَّ فَمٌّ فَو أُفَا

Ғәрәп телендә **[т]** өнөнөң үҙенсәлеге бар: йомшаҡ әйтелешле өндөң ت **(тә)** хәрефе менән һеҙ танышҡайнығыҙ ине инде. Уның ҡаты әйтелешле өнө өсөн ط **(*та*)** **хәрефен** ҡулланалар. Уның артынан ҡалын һуҙынҡылар килә.

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـط | ـطـ | طـ | ط |

57 (1)-се күнегеү. 30-40 тапҡыр ط (та) хәрефе менән төрлө тоташтырыуҙарҙы дөрөҫ итеп яҙығыҙ.

ظ **(ҙа) хәрефенең** дә ҡулланылышы ла ошоға оҡшаш. ذ **(ҙәл)** хәрефенән һуң һуҙынҡылар йомшаҡ әйтелешле итеп уҡылһа, быныһының артынан ҡалын һуҙынҡылар килә.

58(1)-се күнегеү. Ғәрәпсә хәрефтәр теҙмәһен уҡып, телегеҙҙе шымартығыҙ һәм уларҙы иҫтән яҙығыҙ:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـظ | ـظـ | ظـ | ظ |

ظَنَّ ظَاهِرِ نَظَرَ ظِرَ طارَ طَيْرٌ طَرْدٌ طِرَادٌ طِ طَ طُ

59(3)-сө күнегеү. Һүҙҙәрҙе ятлап алығыҙ һәм уларҙан һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| مُسْتَشْفَي | Дауахана | مُظْلِمٌ | Ҡараңғы |
| طَيْرٌ | Ҡош | مُسْلِمٌ | Мосолман ир кеше |
| رَفٌّ | Кәштә | ألإسْلامُ | Ислам |
| شَمْسٌ | Ҡояш | حَرَامٌ | Харам (гонаһ) |
| قَمَرٌ | Ай (планета) | مَيْتٌ | Үле |
| شَهْرٌ | Ай (ваҡыт үлсәме) | أَمٌّ | Әсә,ана |

60(2)-се күнегеү. Бөтә белгән тартынҡы һәм һуҙынҡы хәрефтәрҙән 120 ижек төҙөп яҙығыҙ.

*** **ة (та-марбута) хәрефе** ғәрәп алфавитында тормаһа ла, күп һүҙҙәрҙең аҙағында яҙыла. Был осраҡта һүҙгә ***–тун*** ялғауы өҫтәлә. Хәрефте яңғыҙ һәм һүҙ аҙағында яҙыла торған ике шәкеле бар.

61(3)-се күнегеү. Яңы һүҙҙәрҙе ятлап алығыҙ һәм телмәрҙә ҡулланығыҙ:

| | | | |
|---|---|---|---|
| مَدِينَةٌ | Ҡала | مُسْلِمَةٌ | Мосолман ҡатын-ҡыҙ |
| إِمْرَاةٌ | Ҡатын-ҡыҙ | نُزْهَةٌ | Саф һауала йөрөп килеү |
| بَقَرَةٌ | Һыйыр | جَرِيدَةٌ | Газета |
| شِقَّةٌ | Фатир | جَدِيدَةٌ | Яңы |
| نَافِذَةٌ | Тәҙрә | خَامَّةٌ | Апай |
| سَيَارَةٌ | Машина | خَامِسَةٌ | Бишенсе |
| جَدَّةٌ | Өләсәй | رِسالَةٌ | Хат |
| شَوْكَةٌ | Сәнске | بَدْلَةٌ | Костюм |

ص **(сад) хәрефе** менән, س **(син)** кеүек, **[с]** өнөн билдәләйҙәр, ләкин айырма шунда – уларҙың береһе тик ҡалын һуҙынҡы менән, икенсеһе нәҙек һуҙынҡы менән бергә килә.

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| | | | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| ـص | ـصـ | صـ | ص |

62 (2)-се күнегеү.

Яңы хәрефте үҙегеҙ теләгән 15-20 хәреф менән ҡушып яҙығыҙ.

ض **(дад) хәрефен [дҙ]** өнөн яҙған осраҡта ҡулланалар:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـض | ـضـ | ضـ | ض |

63(1)-се күнегеү. Был яңы хәрефте иҫтә ҡалдырыр өсөн, уны башҡалар менән 30 тапҡыр тоташтырып, яҙып сығығыҙ.

غ **(ғайн) хәрефе** ҡаты әйтелешле [ғ] өнөнөң тамғаһы.Уның яҙылышы түбәндәгесә:

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ башында | Айырым яҙылышы |
|---|---|---|---|
| ـغ | ـغـ | غـ | غ |

64(1)-се күнегеү. Хәрефте 10 төрлө тоташтырып яҙығыҙ, иҫтә ҡалдырығыҙ.

ع **(ғәйн) хәрефе [ғ]** өнөн йомшаҡ һуҙынҡылар менән яҙғанда кәрәк.

| Һүҙ аҙағында | Һүҙ уртаһында | Һүҙ, йәки ижек башында | Айырым, яңғыҙ торғанда |
|---|---|---|---|
| ـع | ـعـ | عـ | ع |

| | | | |
|---|---|---|---|

65(1)-се күнегеү. Әлеге хәрефтең яҙылышын иҫтә ҡалдырыу өсөн 5-10 хәреф менән ялғап яҙығыҙ.

66(3)-се күнегеү. Яңы һүҙҙәрҙән, мәғәнәһенә тап килтереп, һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ, дөрөҫ әйтергә өйрәнегеҙ:

| | | | |
|---|---|---|---|
| عَمَلٌ | Эш | كُرَةٌ | Туп |
| قَرْيَةٌ | Ауыл | فِي | Эстә |
| رَمَضَان | Рамазан | شَجَرَةٌ | Ағас |
| شَارِعٌ | Урам | مَلِكٌ | Король |
| مَسْجِدٌ | Мәсет | رَأي | Баш |
| بَيْتٌ | Өй, йорт | مَحَطَّةٌ | Туҡталыш |
| غَابَةٌ | Урман | طَرِيقٌ | Юл |
| مِلْعَقَةٌ | Ҡалаҡ | رُوسِيَا | Рәсәй |
| كَبِيرٌ | Ҙур | مُوسْكُو | Мәскәү |
| أَرْضٌ | Ер шары | مُعَلّمٌ | Уҡытыусы, мөғәллим |
| صُلْبٌ | Ҡаты | مُعَلّمَةٌ | Уҡытыусы, мөғәллимә |
| صَيْفٌ | Йәй | مِنْطَقَةٌ | Район |

| | | | |
|---|---|---|---|
| صَيَادُ السّ | Балыҡсы | شِتَاءٌ | Ҡыш |
| صِيَامٌ | Һаҡ, күҙәтеү урыны | رَبِيعٌ | Яҙ |
| رِيَاضِيٌّ | Спортсмен | خَرِيفٌ | Көҙ |

Был методик ҡулланмала өйрәнелгән барса хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә теҙеп сығайыҡ:ا

1) ا
2) ب
3) ت
4) ث
5) ج
6) ح
7) خ
8) د
9) ذ
10) ر
11) ز
12) س

13)ش

14)ص

15)ض

16)ط

17)ظ

18)ع

19)غ

20)ف

21)ق

22)ك

23)ل

24)م

25)ن

26)و

27)ه

28)ي

## 4. **Ғәрәп теленең ҡайһы бер грамматик ҡағиҙәләре**

Килеш ялғауҙары

Был телдәге һүҙҙәр өс килештә үҙгәрә ала: төп килеш, эйәлек килеш һәм төшөм килеш.

Төп килештәге һүҙҙәр *тәнвин дамма* менән яҙыла: شمسٌ، قَمَرٌ، رَبيعٌ

Эйәлек килеш ялғауына *тәнвин кәсрә* тап килә: شمسٍ، قمرٍ، ربيعٍ

Эйәлек килештә исем алдынан түбәндәге ярҙамсы һүҙҙәр килә: في، علي، عَنْ، إلي һ.б.

Мәҫәлән, *әсәйем ауылда* тигән һүҙбәйләнеште тәржемә итәйек:

أُمٌّ في قَرْيٍ

Төшөм килеш өсөн *тәнвин фәтхә* өҫтәү хас: شمسًا، قمرًا، قريةً

Был осраҡта исем ҡылымдың артынан килә.

**Иҫкәрмә***:** әгәр һүҙ аҙағында *та-марбута* тормаһа, *тәнвин фәтхәгә* уҡылмай торған *өнһөҙ әлиф* өҫтәп яҙыла: شمسًا، قمرًا

Әгәр һүҙ аҙағында *та-марбута* торһа, *өнһөҙ әлиф* ҡуйылмай: قريةً

67(3)-се күнегеү. Өлгө буйынса 66-сы күнегеүҙәге һүҙҙәрҙе килештәрҙә үҙгәртеп яҙығыҙ:

| Төп килеш | Эйәлек килеш | Төшөм килеш |
|---|---|---|
| عَمَلٌ | عَمَلٍ | عَمَلاً |

## Артикль.

Артикль – ҡайһы бер телдәрҙә билдәлелек һәм билдәһеҙлекте белдереү өсөн исемдәргә өҫтәлә торған киҫәксә. Ғәрәп телендә һүҙҙең аҙағында *тәнвин* торһа, ул *билдәһеҙлек артикле* һанала. Тимәк, тәнвинле һүҙ менән уҡыусыға, йәки тыңлаусыға таныш булмаған билдәһеҙ предмет (нимәлер), йә булмаһа, билдәһеҙ кеше (кемдер)

тураһында хәбәр ителә. (Башҡорт телендә бындай һүҙҙәр уртаҡлыҡ исемдәр тип атала).

Ғәрәп телендә билдәлелек төшөнсәһен күрһәтеү өсөн һүҙҙең алдына أَلْ *(әлиф-ләм)* артикле өҫтәлә. Был артикль *әл* тип уҡыла һәм конкрет билдәле булған предметты, күренеште, йәки кешене атаусы һүҙҙең алдына ҡуйыла. (Башҡорт телендә бындай һүҙҙәр яңғыҙлыҡ исемдәр тип атала).

Әммә һүҙҙәргә артикль өҫтәргә өйрәнер алдынан, бөтә ғәрәп хәрефтәренең ике төркөмгә бүленеүе тураһында түбәндәге ҡағиҙәне үҙләштереү мотлаҡ:

1.Ҡәмәриә-хәрефтәр ا، ب، ج، ح، خ، ع، غ، ف، ق، ك، م، و ، ه، ي .

2.Шәмсиә-хәрефтәр ت، ث، د، ذ، ر ، ز، س، ش، ص، ض، ط، ظ، ل، ن.

14 ҡәмәриә-хәрефенә осраған билдәлелек артикле *әл сәкен* менән яҙыла һәм уҡыла (Изһар-ҡәмәриә):

أَلْمَدِينَةُ، أَلْعَمَلُ، في أَلْبَيْتِ، رَاَي الْمَسْجِدَ، أَلْمِنْطَقَةُ

*Әл-мәдинәтү, әл-һәмәлү, фи-л-бәйти, рәә әл-мәсджидә, әл-минтаҡатун*

14 шәмсиә-хәрефкә осраған билдәлелек артиклендәге *л (ләм)* уҡылмай, ә шәмсиә-хәреф үҙе *тәшдид* ярҙамында икеләтелә (Идғам-шәмсиә):

اَلشَّمْسُ، في اَلشِّتَاءِ، الصَّيْفُ، أَلشَّجَرَةُ

*Әш-шәмсү, фии-әшшәтәәғи, ассайфу, әшшәджәрәтү*

Билдәлелек артикле өҫтәлгәндә, *тәнвин* һәм *өнһөҙ әлиф* юғала, унын урынына тәнвиндең һуҙынҡыһы (фәтхә, кәсрә, дамма) ғына уҡыла.

68(3)-се күнегеү. 66-сы күнегеүҙәге һүҙҙәргә *әл (әлиф-ләм)* артикле өҫтәп яҙығыҙ.

69(3)-се күнегеү. 61-се күнегеүҙәге һүҙҙәргә артикль өҫтәп яҙығыҙ.

70(3)-се күнегеү. «Фатиха» сүрәһен уҡып телегеҙҙе шымартығыҙ, ятлап алығыҙ, күсереп яҙығыҙ. Артикле булған һүҙҙәрҙе табығыҙ.

بِسْــمِ الله الرَّحْمَانِ الرَّحِيمِ

(أَلْحَمْدُ لِلَّهِ رَبِّ أَلْعَالَمِينَ). (الرَّحْمَانِ الرَّحِيمِ). (مَالِكِ يَوْمِ الدِّينِ). (إِيَّاكَ نَعْبُدُ و إِيَاكَ نَسْتَعِينُ). (إِهْدِنا الصِّراطَ الْمُسْتَقِيمَ). (صِرَاطَ الذين أَنْعَمْتَ عَلَيْهِمْ غَيْرِ الْمَغْضُوبِ عَلَيْهِمْ و لا الضالِينَ).

71(3)-сө күнегеү. 112-се сүрәнең («Ихлас») тексын күсереп яҙығыҙ һәм иҫтә ҡалдырығыҙ.

بِسْــــمِ الله الرَّحْمَانِ الرَّحِيمِ

(قُلْ هُو الله أَحَدٌ).( الله الصَّمَدٌ). (لَمْ يَلِدْ و لَمْ يُلَدْ).( و لَمْ يَكُن لَّهُ كُفُوًا أَحَدٌ ).

72(3)-сө күнегеү. 113-сө («Таң») сүрәне ятлағыҙ, күсереп яҙығыҙ.

بِسْــــمِ الله الرَّحْمَانِ الرَّحِيمِ

(قُلْ أَعُوذُ بِرَبِّ الفَلَقِ). (مِنْ شَرِّ مَا خَلَقَ). (وَ مِنْ شَرِّ غَاسِقٍ إِذَا وَقَبَ). (و مِنْ شَرِّ النَّفَّاثَاتِ في العُقَدِ). (و مِنْ شَرِّ حَاسِدٍ إذا حَسَدَ).

73(3)-сө күнегеү. 114-се («Кешеләр») сүрәне күсереп яҙығыҙ, ятлап алығыҙ.

بِسْــــمِ الله الرَّحْمَانِ الرَّحِيمِ

(قُلْ أعوذُ بِرَبِّ النَّاس). (مَلِكِ النَّاسِ). (إلاه النَاسِ). (مِنْ شَرِّ الوَسْوَاسِ الخَنَّاس). (الذي يُوَسْوَسُ في صُدُورِ النَّاسِ). (مِنَ الجِنَّةِ و الناسِ).

74 (3)-се күнегеү. 110-сы («Ярҙам») сүрәне уҡығыҙ, ятлап алығыҙ һәм яҙығыҙ.

بِسْــــمِ الله الرَّحْمَانِ الرَّحِيمِ

(إذا جَاءَ نَصْرُ اللهِ وَ الفَتْحِ). (و رَأَيْتَ النَّاس يَدْخُلُونَ في الدِّينِ اللهِ أَفْوَاجًا). (فَسَبِّحْ بِحَمْدِ رَبِّكَ و الستَغْفِرْهُ إِنَّهُ كَانَ تَوَّابًا).

# Сәкенле һәм тәнвинле ن (нүн) хәрефен дөрөҫ уҡыу өсөн дүрт ҡағиҙә

1) الإظهار (Изһар)
2) الإدغام (Идғам)
3) الإقلاب (Иҡлаб)
4) الأخفاء (Ихфә)

## 1.Изһар[1]

*Сәкенле* ن (нүн) хәрефе һәм *тәнвин* артынан ء ه ع ح غ خ

хәрефтәренең береһе килгән осраҡта, улар икеһе лә, үҙгәреш кисермәйсә, асыҡ итеп уҡыла.

Яҙыу өлгөләре: كُلٌّ امَنَ وَ مَنْ أعرَضَ يَنَأَ◌وْنَ

| | | |
|---|---|---|
| فَرِيقًا هَدَي | مِنْ هَادٍ | يَنْهَوْنَ |
| حَكِيمٌ عَلِيمٌ | مِنْ عِلْمٌ | أَنْعَمْتَ |
| مِنْ حَكِيمٍ حَمِيدٌ | مَنْ حَادَّ | وَانْحَر |
| مَاءً غَيْرِ اسِن | مِنْ غِلٍّ | فَسْيُنْغَضُونَ |
| يَوْمَئِذٍ خَاشِعَةٌ | هَلْ مِنْ خَالِقٍ | وَ المِنْخَنَقَةُ |

Күнегеүҙәр:

1.Ниндәй хәрефтәр алдынан *сәкенле нүн* һәм *тәнвин* асыҡ уҡыла?

2.«Ихлас»(112-се) һәм «Әл-Мәсәд» (111-се) сүрәләрен күсереп яҙығыҙ һәм уларҙа *изһар* ҡағиҙәһенә бойһонған хәрефтәрҙе табығыҙ.

**1. Идғам[2]**

---

[1] Ғәрәп телендә: *нисек бар, шулай; асыҡ, асыҡтан-асыҡ, күҙгә күренеп торған, көн кеүек асыҡ* мәғәнәһендә.

[2] Ғәрәп телендә мәғәнәһе: ҡушыу, берләштереү. Был осраҡта өндәр ҡушыла, йәғни аҙаҡҡы өн алдағыны тарафынан йотола.

Әгәр ҙә түбәндәге хәрефтәрҙең береһе *сәкенле нүн*, йәки *тәнвин* артынан килә икән, был осраҡта [н] *нүн* өнө аталмай, ә уның артында тороусы хәреф икеләтеп уҡыла: ي ر م ل و ن

Идғам ике төркөмгә бүленә:

1.**Идғам би гүннәһ** (гүннәле идғам). Икеләтелгән *сәкенле нүн* менән *тәнвинде* уҡығанда, үпкәнән сыҡҡан тын танауға ебәрелеп, ي [й] *йә,* م [м] *мим,* ن [н] *нүн,* و [ү] *уәү* өндәренән йотолоп, бераҙ тотоп уҡыла.

Яҙыу өлгөләре:

| | |
|---|---|
| مَنْ يَّقُولُ | وُجُوهٌ يَّوْمَئِذٍ |
| مِنْ وَّالٍ | حَسَنَةً وَّقِنَا |
| مِنْ مَّالٍ | صِرَاطٍ مُّسْتَقِمٌ |
| عَنْ نَّفْسٍ | يَومَئِذٍ نَّاعِمَة |

2.**Идғам биғайри гүннәһ** (гүннәһеҙ идғам). Икеләтелгән хәрефтең өнөн атағанда, үпкәнән сыҡҡан тын танау аша ебәрелмәй. Тимәк, был осраҡта *сәкенле нүн* менән *тәнвин* ل [л] *ләм* һәм ر [р] *рә* хәрефтәренә әйләндереп уҡылалар.

Яҙыу өлгөләре:

| | |
|---|---|
| و لَمْ يَكُنْ لَّ◌ًهُ | اَنْدَادًا لِّيُضِلُّوا |
| مِنْ رَّبِّهِم | لِرُؤُوفٌ رَّحِيمٌ |

Күнегеүҙәр:

1. «Әл-Мәғун» (107-се) сүрәһен күсереп яҙығыҙ һәм *гүннәһеҙ идғам* ҡағиҙәһенә тап килгән хәрефтәрҙе табығыҙ.

2. «Ҡөрәйеш» (106-сы) сүрәһендәге һүҙҙәрҙең араһынан *гуннәле идғам* миҫалындағы хәрефтәрҙе ҡарағыҙ.

3. Сәкенле *нүн* йәки *тәнвин* ниндәй осраҡта уҡылмай, ә унының артынан килгән хәрефтең өнө икеләтелә?

**3.Иҡләб[3]**

Сәкенле ن *нүн* йәки *тәнвин* ب *бә* хәрефенә юлыҡҡанда, танау өнө م [м] *мимгә* оҡшатып уҡыла.

Яҙыу өлгөләре:

أَنْبَهُمْ أَنْ بُورِكَ

كَلُّ نَفْسٍ بِماَ كَسَبَتْ

Күнегеүҙәр:

1.Иҡләб ҡағиҙәһен аңлатығыҙ.

2. «Әл-Һүмәзәһ» (104-се) сүрәһен күсереп алып, иҡләб ҡағиҙәһенә ҡараған хәрефтәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.

**4.Ихфә[4]**

Сәкенле *нүн* йәки *тәнвин* алдағы өс ҡағиҙәгә инмәй ҡалған ихфә хәрефтәренә ( ت ث ج د ذ ز س ش ص ض ط ظ ف ق ك) юлыҡҡанда, үпкәнән сыҡҡан тын танау аша бераҙ һуҙып һәм [ң] өнөнә оҡшатып уҡыла. Йәғни, изһарҙағыса, аныҡ [н] өнө аталмай, әммә ләкин, идғамдағы кеүек, бөтөнләй юғалып та ҡалмай.

Яҙыу өлгөләре:

عَنْ صَلاَتِهِمْ مَنْ ذَهَبَ مَنْ ثَقُلَتْ مَنْ كَانَ مِنْ شَرِّ

---

[3] Ғәрәп телендәге мәғәнәһе: *әйләндереү, алмаштырыу*. Был осраҡта *нүн* хәрефе *мим* хәрефе менән алмаштырып уҡыла.

[4] Ғәрәп телендәге мәғәнәһе: *йәшереү, юғалтыу*. Был осраҡта *нүн* хәрефенең өнө уҡылмай.

مَنْ قَبْلُ   اَنْ  سَيَكُونُ  مِنْ  دُونِ    مِنْ زَقُّومٍ  مِنْ فِئَةٍ  مَنْ تَابَ  مِنْ
ضَرِيعٍ    مِنْ ظَهِيرٍ

Күнегеүҙәр:

1.Ихфәнең хәрефтәре нисәү һәм ниндәйҙәр?

2. «Әл-Фәләҡ» (113-сө) сүрәһен күсереп яҙығыҙ, ихфә хәрефтәренең аҫтына һыҙығыҙ.

## Сәкенле م хәрефен дөрөҫ ҡулланыу ҡағиҙәләре

Сәкенле *мим* хәрефенең өнөн төрлө осраҡтарҙа дөрөҫ уҡыр өсөн, *идғам шәфәви, изһар шәфәви, ихфә шәфәви* ҡағиҙәләрен үҙләштереү кәрәк буласаҡ.

### 1.Идғам шәфәви

*Сәкенле* م *мим* хәрефе менән *хәрәкәле* م *мим* хәрефе йәнәш килһә, ирендәрҙең ҡымтылған хәлендә танау аша икеләтеп [мм] тип уҡыла.

Яҙыу өлгөләре: لَجَّيْنَاكُمْ مِّنْ    لَهُمْ مَّا يَشَاؤُونَ

### 2. Ихфә шәфәви[5]

*Сәкенле* م *мим* хәрефененән һуң *бә* хәрефе осрағанда ла, улар [мм] рәүешле икеләтеп (һуҙып) уҡыла.

Яҙыу өлгөләре: وَ أَنِ أَحْكُمْ بَيْنَهُمْ بِمَا

### 3.Изһар шәфәви[6]

Ҡалған 26 ғәрәп хәрефе менән *сәкенле* م *мим* хәрефе үҙгәрешһеҙ, аныҡ уҡыла.

Яҙыу өлгөләре:

[5] Алдағы пункттағыса: был хәреф өнөнөң әйтелеше ирендәрҙе ҡымтыу хәлендә йәшерен булыуын, йәки әйтелмәй ҡалыу осрағы .

[6]Аныҡ әйтелешле ирен тартынҡыһы.

أَلْاَمْرُ   لَعَلَّكُمْ تُمْسُونَ   أَنْعَمْتَ

Үҙ артынан *фә* һәм *уәү* хәрефтәре килгәндә *сәкенле* م *мим* **баçымлы** итеп уҡылыу осрағы **изһар шәфәви шәдид**[7] тип атала:

لَهُمْ فِي الدُنْيَا خِزْيٌّ و لَهُمْ فِي أَلْأَخِرَةِ عَذَابٌ عَظِيمٌ

لَهُمْ دَرَجَاتٌ رَبِّهِمْ وَ مَغْفِرَةٌ و رِزْقٌ كَرِيمٌ

Күнегеүҙәр:

1. «Әл-Фиил» (105-се) сүрәһен күсереп яҙығыҙ. Бер һыҙыҡ менән *изһар шәфәви шәдид,* ике һыҙыҡ менән *ихфә шәфәви* ҡағиҙәһенә ҡараған хәрефтәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.

2. «Ҡөрәйеш» (106-сы) сүрәһендәге *иҙғам шәфәви* хәрефтәрен бер һыҙыҡ, *иҙһар шәфәви* хәрефтәрен ике һыҙыҡ менән билдәләгеҙ.

## Идғам мөстәкил[8] ҡағиҙәләре

Был ҡағиҙә үҙе өс өлөштән тора:

**1.Идғам мүтәмәçиләйн**[9] – шәкелдәре бер төрлө булған хәрефтәр бер-бер артлы килгәндә, алда торғанының өнө арттағыһы тарафынан йотолоуы. Был ҡағиҙә ب ك ل хәрефтәренә генә ҡағыла. Мәçәлән, сәкенле ب хәрефенән һуң нindәй ҙә булһа бер хәрәкә менән ب хәрефе килһә, был хәрефтең өнө [ббә], [бби], [ббү] тип икеләтеп уҡыла.

---

[7] Ғәрәпсә: **шәдид** - *көслө.* Был осраҡта *мим* алдағы баçымлы хәреф тәьçирендә яңғырауыҡлы, көслө итеп уҡыла.

[8] Ғәрәпсә: **мөстәкил** – *үҙ аллы, ирекле*. Был осраҡта бер-береһенән бойондороҡһоҙ хәрефтәрҙең ҡушылып уҡыуы күҙ уңында тотола;

[9] Ғәрәпсә: **Идғам мүтәмәçиләйн** - ике нәмәнең (был осраҡта хәрефтең) бер-береһенә *оҡшашланыуы, үҙләштерелеүе, үҙ итеүе;*

Яҙыу өлгөләре: قُلْ لَّهُمْ يُدْرِكْكُّمْ اِذْهَبْ بِكِتَابِي

**2.Идғам мүтәкарибәйн**[10] – алдан килгән хәрефтең өнө арттағыһы тарафынан йотолоуҙоң ике осрағын күрһәтә:

а) *сәкенле* ***ләм*** ل үҙенең артынан ниндәй ҙә булһа хәрәкәһе булған ر ***(рә)*** тарафынан йотола. Мәҫәлән, بَل رَّفَعَهُ

б) сәкенле ق **(ҡаф)ты** уға эйәреп берәй төрлө хәрәкә менән килеүсе ك **(кәф)** хәрефе йота. Мәҫәлән, أَلَمْ نَخْلُقكُّمْ

**3.Идғам мүтәжәнисәйн** [11] – түбәндәге осраҡтарҙа парлы тартынҡыларҙы ҡушып, икеләтеп уҡыу:

а) сәкенле ت *тә* хәрефенән һуң ниндәйҙер хәрәкә менән د *(дәл)* яҙылһа, уларҙың тәүгеһе уҡылмай, икенсеһе د [дд] тип икеләтә уҡыла;

мәҫәлән, أُجِيبَتْ دَّعْوَتُكُمَا أَثْقَلَتْ دَّعَوُا

б) сәкенле د хәрефенә эйәреп берәй хәрәкә менән ت хәрефе килгән осраҡта, киреһенсә, ت [тт] тип икеләтелә, ә د төшөп ҡала; мәҫәлән, عَبَدْتُ قَدْ تَّبَيَّنَ

в) сәкенле ت хәрефенең артынан ниндәй ҙә булһа берәр хәрәкә менән ҡаты ط *та* хәрефе осраһа, арттағы ط [тт] икеләтелә , ә алдағыһы йотола;

мәҫәлән, هَمَّتْ طَّائِفَةَ

---

[10] Ғәрәпсә: **Идғам мүтәкарибәйн** - ике нәмәнең үҙ-ара *яҡын булыуы.* Был осраҡта өндәренең әйтелеше буйынса бер-береһенә яҡын, оҡшаш ике хәрефтең бергә ҡушылып уҡылыуы;

[11] Ғәрәпсә: **Идғам мүтәжәнисәйн** - *эстәлеге, йөкмәткеһе буйынса тиң.* Был осраҡта әйтелештәре яғынан бер төрлө хәрефтәрҙең өндәре уҡыған ваҡытта бергә ҡушылыуы.

г) сәкенле ҡаты тартынҡы ط хәрефе үҙе алдан килеп, йомшаҡ әйтелешле ت хәрефе хәрәкәһе менән уға эйәрһә, был осраҡта беренсеһе уҡылмай, икенсеһе икеләтеп уҡыла;

мәҫәлән, بَسَطْتَّ فَرَطْتُّ

д) сәкенле ذ *ҙәл* хәрефенә хәрәкәле ҡаты ظ *ҙа* хәрефе эйәргән осраҡта, уныһы икеләтелә, ә сәкенле ذ *ҙәл* төшөп ҡала;

мәҫәлән, إِذْ ظَّلَمْتُمْ

е) сәкенле һаңғырау өнлө ث *ҫә* хәрефенән һуң килгән яңғырау ذ *ҙәл* хәрефе ниндәй ҙә булһа хәрәкә менән торһа, ث әйтелмәй ҡала, ذ икеләтелә;

мәҫәлән, يَلْهَثْ ذَّلِكَ

ж) сәкенле ب *бә* хәрефе артынан яҙылған ниндәйҙер хәрәкәһе менән م *мим* хәрефе торһа, ул икеләтеп уҡыла, ә ب өнө юғала; мәҫәлән, يَا بُنَيَّ ارْكَبْ مَّعَنَا

Ҡабатлау өсөн эш:

1. Идғам мүтәмәҫиләйн ҡағиҙәһен иҫтә ҡалдырығыҙ.

2. Идғам мүтәҡарибәйн ҡағиҙәһен иҫтә ҡалдырығыҙ.

3. Идғам мүтәжәнисәйн ҡағиҙәһен иҫтә ҡалдырығыҙ.

## Мәдтәрҙең төрҙәрен ҡулланыу ҡағиҙәләре

*Мәдле* хәрефтәр тип оҙон әйтелешле һуҙынҡыларҙы атайҙар. Улар барлығы өсәү: ا و ي (*әлиф), (үәү), (йә).* Улар үҙҙәренә оҡшаш хәрефле һуҙынҡыларҙы һуҙып уҡыу кәрәклеген күрһәткән билдәләр:

а) ا – алдан килгән хәреф фәтхәле булып, унан һуң килгән *әлиф* үҙе хәрәкәһеҙ булһа, ул мәдд хәрефе була һәм тартынҡының артынан [*әә* ] рәүешле оҙайтып уҡыла;

б) يِ – *йә* хәрефе үҙе хәрәкәһеҙ яҙылып, уның алдындағы тартынҡы хәреф кәсрәле булһа, был يِ мәдд хәрефе була һәм тартынҡы өнгә ҡушылып оҙон [*ии* ] итеп уҡыла;

в)و – *үәү* хәрефе хәрәкәһеҙ килеш даммалы хәреф һуңынан торһа, ул мәдле [*уу* ] һуҙынҡыһы була.

**Мәдле хәрефтәрҙе ҡулланыу ҡағиҙәләре ике төрлө:**

1.**Мәдд тәбиғи.** [12] Хәреф мәдд булып, унан артынан сәбәби мәдд һәмзә йәки сәкен тормаһа, был *мәдд тәбиғи* була һәм ике тапҡыр һуҙып уҡыла. Мәҫәлән,

ҡаала –قَالَ , ҡыйла –قِيلَ , яҡуулу – يَقُولُ

**2.Мәдд ғәйр тәбиғи**[13] – үҙе алты төркөмгә бүленә:

**2.1. Мәдд вәджиб**[14] **муттасыйл**[15]**.** Әгәр сәбәби мәдд-һәмзә һәм мәдд хәрефе икеһе бер һүҙҙә килһә, мәдд муттасыйл була. Мәдд муттасыйлда дүрт әлиф миҡдары *(8 тапҡыр)* һуҙып уҡыу *вәджиб*. Мәдд мөттасыйлда *ҡыҫҡаҡ һәмзә* килә.

Яҙыу өлгөләре: أُلَئِكَ مَا شَاءَ اللهُ

**2.2. Мәдд джәиз мунфасыйл**[16]**.** Әгәр мәдле һуҙынҡы берәй һүҙҙең аҙағында, ә һуҙып уҡыуҙың сәбәбе *һәмзә* уның артынан килеүсе икенсе һүҙҙең башында осраһа,был мәдд мунфасыйл була. Был осраҡта ике йәки дүрт әлиф оҙонлоғонда

---

[12] Һүҙҙең морфологик төҙөлөшөнә ярашлы, *нисек бар, шулай* һуҙып уҡыу;

[13] Тексты тасуирлау өсөн, махсус рәүештә *яһалма һуҙып уҡыу*;

[14] *Мотлаҡ, мәжбүри, һис һүҙһеҙ тейешле*;

[15] *Ҡушыу, тоташтырыу*. Был осраҡта: бер һүҙ эсендә мәдле хәреф һәмзәнән алда торғанда, уның өнөн мотлаҡ һуҙып уҡыу.

[16] Джәиз – *мотлаҡ түгел; ихтимал, бәлки.* Мөнфасыйл – *айырым*. Был осраҡта: мәдле хәреф һәм һәмзә икеһе ике һүҙгә ҡарай;

һуҙып уҡырға була *(дүрт, йәки һигеҙ тапҡыр).* Мәдд мунфасыйлда һәмзә оҙонса әлиф таяҡсаһы өҫтөнә ҡуйыла.

Яҙыу өлгөләре: رَبِّ العَالَمِينَ

**2.3. Мәдд ғарыйд ли-с-сәкен.** Әгәр һүҙ аҙағында туҡтап, аҙаҡҡы хәрефкә ғарыйд-ли-с-сәкен (үҙебеҙ ваҡытлыса ҡуйған сәкен) бирһәк, һәм шул хәрефтең алдындағыһы мәдле хәреф икән, ул осраҡта мәдд ғарыйд ике-дүрт әлиф үлсәмендә *(дүрт-һигеҙ тапҡыр)* һуҙып уҡыла.

Яҙыу өлгөләре:

**2.4.Мәд ләзим**[17]**.** Әгәр ҙә *мәдле* хәрефтән һуң *шәддәле (тәнвин)* хәреф килһә, мәдд хәрефе өс әлиф оҙонлоғонда *(алты тапҡыр)* һуҙып уҡыла.

Яҙыу өлгөләре: وَ لاَ الضَّآلِّين الحَاقَّةُ الصَّاخَّةُ

Мәдд ләзим шулай уҡ ниндәйҙер аят үҙе, йә аяттың башы айырым хәрефтән генә торғанда ла осрай. Бындай хәрефтәр алфавиттағы үҙ атамаһы менән уҡыла һәм *алты иҫәбенә һуҙып* уҡыла:

يس الم ق ن ص

**2.5. Мәдд сылә** ике төрлө була**:**

**а)мәдд сылә ҡубрә** ҡағиҙәһенә ярашлы, *даммалы* йә *кәсрәле* ه хәрефенә тамамланған һүҙгә эйәреп, *һәмзәгә* башланған һүҙ осраһа, был ه хәрефен *дүрткә тиклем һуҙып* уҡыу тейешле.

Ҡарағыҙ: مِنْ دُونِهِ ءَالِهَةً

**б)мәдд сылә суғрә** осрағында *дамма*, йә *кәсрә хәрәкәле* ه *һә* хәрефе артынан һуң килгән һүҙ ниндәй генә хәрефкә башланһа ла, ه *һә* хәрефенең өнө *ике тапҡырға* оҙоная.

---

[17] Ләзим - *мотлаҡ, мәжбүри.* Ҡөрьәнде уҡыған ваҡытта тәджвид ҡағиҙәһенә яраҡлы рәүештә уны үтәмәү һис ярамаған күренеш.

Ҡарағыҙ: فَوَسَطْنَ بِهِ جَمْعًا   إِنَّ بِعِبَادِهِ خَبِيرٌ بَصِيرٌ

**2.6. Мәдд ллин.** Лин хәрефтәре икәү: *үәү, йә*.

Әгәр берәй һүҙҙә *фәтхәле* хәрефтән һуң *сәкенле мәдд- хәреф* осраһа, был мәдле ллин-хәреф *ике-дүрт-алты* иҫәбенә тиклем һуҙып уҡыла.

**Ҡәлҡәлә[18] ҡағиҙәләре**

Был ҡағиҙәгә түбәндәге биш хәреф бойһона: د ج ب ط ق

Уларҙы иҫтә ҡалдырыу өсөн ғәрәп телендә һүҙбәйләнеште иҫтә ҡалдырыу етә:

*Иҫтә калдырығыҙ:* Әгәр был хәрефтәр *сәкен* билдәһе менән билдәләнһә, уларҙы уҡығанда [ә] өнө ишетелә (*дә, джә, бә, тә, ҡә*).

**Ҡәлҡәлә ҡағиҙәләре ике төркөмгә бүленә:**

2). Әгәр *сәкенле ҡәлҡәлә хәрефенең* береһе һүҙҙең уртаһында торһа, был осраҡ **суғрә[19]** тип атала.

Өлгөләр: يَقْتُلُونَ   يَبْدَأُ

2). Ҡәлҡәлә хәрефтәрҙең береһе һүҙҙең аҙағында торһа, был тыныш билдәһе, йәғни уҡыған саҡта унда пауза яһала. Был осраҡ **ҡубрә[20]** тип атала.

Өлгөләр: عَذَابْ   عَلَقْ

Күнегеүҙәр:

1.Ҡәлҡәлә ҡағиҙәһен аңлатығыҙ;

2. 112-се сүрәне («Ихлас») күсереп яҙығыҙ, *ҡәлҡәлә-кубрә* хәрефтәренең аҫтына һыҙығыҙ;

---

[18] Ҡәлҡәлә – тибрәтеү, ҡалтыратыу, һелкетеү. Был осраҡта: сәкенле хәрефтең өнө һуҙынҡы ярҙамында көсәйтелеп ҡалтыратып уҡыла;

[19] Суғрә – аҙ, бәләкәй, етеңкерәмәгән. Был осраҡта: ҡәлҡәлә-хәреф көслө яңғыратылмай;

[20] Ҡубрә – оло, ҙур, артыҡ. Был осраҡта: ҡубрәле өн артығыраҡ көслөрәк яңғыратыла.

3. 106-сы сүрәләге («Ҡөрәйеш») һүҙҙәрҙә *кәлҡәлә-суғрә* ҡағиҙәһенә бойһонған хәрефтәрҙе табығыҙ.

**Уҡыуҙы башлауға һәм тамамлауға ҡағылышлы талаптар**

Изге «Ҡөрьән Кәримде» уҡый башлау һәм уҡыуҙы туҡтатыуға ҡағылышлы махсус талаптарҙы үҙләштереү мотлаҡ.

## Уҡыуҙы башлау

## (الوقف و الابتداء)

Изге Китапты уҡыуға тотонорҙан, йә булмаһа «Ҡөрьән Кәрим»дән цитаталар килтерерҙән алда һәр ваҡыт мотлаҡ

*Әғүҙү биЛләһи минә-шшайтани-рраджим*

أَعُوذُ بِاللهِ مِنَ الشَيْطَانِ الرَّجِيمِ

тигән инеш һүҙҙәрҙән башлау кәрәк. Унан һуң

*Бисмиллаһи-ррахмани-ррахим*

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَانِ الرَّحِيمِ

фразаһы әйтелә. 9-сы торған «Әт-Тәүбәһ» сүрәһенән башҡа бөтә сүрәләр ҙә шунан башлана.

Уҡыуға тотоноу алдынан үтәлергә тейеш өс талапты иҫтә ҡалдырығыҙ:

1. Ниндәй ҙә булһа аятты башынан, йә булмаһа мәғәнәүи яҡтан бөтөн, теүәл, үҙаллы булған бер өлөшөнән башлап уҡырға тотоноу – *рөхсәт ителгән, тыйылмаған, мөмкин булған осраҡ*;

*2.* Тотороҡло һүҙбәйләнеште тамамламай өҙөү, йә булмаһа, мәғәнәһе буйынса үҙ-ара бәйле булған һүҙҙәрҙең алдағыһын уҡымай ҡалдырыу – *рөхсәт ителмәгән күренеш;*

3. Һөйләмде, уның мәғәнәһен кирегә үҙгәртә торған һүҙҙән башлап, уҡыу һәм ошоноң менән ҡапма-ҡаршы фекер тыуҙырыу – *насар; шелтәгә лайыҡлы, тыйылған осраҡҡа һанала.*

## Уҡыуҙан туҡтау

Ниндәй ҙә булһа аяттың аҙағына еткәндә, йә булмаһа, тын етмәү сәбәпле мохтажлыҡ тыуһа, берәй һүҙҙә туҡталып алырға мөмкин. Был осраҡта һүҙҙең аҙағында тороусы хәрәкәне сәкен менән алмаштырып тороу кәрәк буласаҡ. Ләкин артабан уҡыуҙы дауам иткәндә, ул һүҙҙе яңынан нисек кәрәк шулай, дөрөҫләп, ҡабаттан уҡыу мотлаҡ.

**Тын алыш (Пауза) – Сәктә**

Уҡыуҙан туҡтап тын алыу *бер*гә тиклем һанау иҫәбенә ҡабул ителгән күренеш. Изге Ҡөрьән Кәримде уҡыусыға *тын алырға рөхсәт ителгән биш урын* бар, улар س хәрефе менән билдәләнгән. Уларҙың өлгөләрен түбәндәге сүрәләрҙән ҡарағыҙ:

1. «Әл-Кәһф» (Мәмерйәләр) сүрәһе: الكهف

2. «Йәсин» (36-сы) сүрәһе: يس

3. «Әл-Ҡиәмә» (75-се) сүрәһе: القيامة

4. «Әл-Мөтәффифин»(83-сө) сүрәһе: المطففين

5. «Әл-Хәҡҡа» (69-сы) сүрәһе: ال

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Байышев Ф. Ҡөрьән Кәрим.– Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1992. – 960 бит.
2. Бейешев Ә.Ғ., Сөйәрғолов Ә., Хисамов Ғ.А. Ҡөрьән Кәрим – Өфө: Китап, 2009.– 960 бит.
3.Бейешев Ә.Ғ. Башҡорт телендә йөрөгән ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре. – Өфө: Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө Ғилми Үҙәге Тарих, Тел һәм Әҙәбиәт институты, 2009. –140 бит.
4.Харисова Г.Х. Азбука арабского языка. – Казань: ОАО “Татмедиа”, 2007. –48 стр.
5.Әхмәдһади Максуди. Мөғаллим сәни. – Казан, 2004. – 48 бит.